**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ**
**ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ**
**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕЛГӘН КИТАПХАНАЛАР СИСТЕМАҺЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**ҮҘӘК РАЙОН КИТАПХАНАҺЫ**
**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ БҮЛЕГЕ**

# Уҡытыусы һәм остаз йылына арналған әҙәби кисә «Һәр уҡытыусы хөрмәткә лайыҡ»

**Сценарий авторҙары:**
*Рәмилә Файзуллина,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире,*
*Лира Такалова,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге китапханасыһы*

**Аҡъяр - 2023 й.**

**Маҡсат:** Уҡытыусы һөнәренә иғтибар йүнәлтеү, йәмғиәттә уҡытыусы хеҙмәтенең мөһимлеге, уның бөйөк роле һәм педагогтарҙың кәрәклеге хаҡында һөйләшеү, изге һөнәргә ҡарата хөрмәт, һөйөү уятыу.

**Йыһазландырыу:** «Уҡытыусы – изге һөнәр» исемле китап күргәҙмәһе, телевизор, слайд-презентация, конкурс материалдары.

## Сценка «Күңелле мәктәп йылдары»

**1-се алып барыусы:** - Эй әхирәткәй беләһеңме, минең улым бишенсе класҡа күсте бит инде, баҡтыниһәң хәҙер ни бишенсе кластан уҡ блатың, брат-сватың булырға тейеш икән.

**2-се алып барыусы:** - ыстааа шулаймыыы, нимәгә икән?

**1-се алып барыусы:** - бына әҙәбиәт уҡытыусыһы балаларҙан Салауат Юлаев, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Аҡмулла, Зәйнәб Биишева менән танышһығыҙмы тип һораған.

**2-се алып барыусы:** - дәәә, ул түрәләр ҡайҙа ултыра икән....

**1-се алып барыусы:** – Әхирәт, минең улым беренсе көндән үк икеле алып ҡайтҡан.

**2-се алып барыусы:** – бына һиңә, нишләп ул тағы.

**1-се алып барыусы:** – Атаһы ни: «Әгәр икеле алып ҡайтһаң, күрмәгәнеңде – күрһәтәсәкмен!», тигән.

**2-се алып барыусы:** - Ә минең улым атаһының фотоһын дәфтәренең тышына йәбештереп алған.

**1-се алып барыусы:** – ыстаа, нишләп икән?

**2-се алып барыусы:** – Уҡытыусыһы ни: «Өйгә эшеңде эшләргә ярҙам иткән алйотто бер күрергә ине», - тип әйткән.

**1-се алып барыусы:** – Эй, әхирәт, минең иптәшем ата-әсәләр йыйылышынан бына нимә ишетеп ҡайтҡан: японияла робот уйлап тапҡандар ул 5 минут эсендә 10 бурҙы тотҡан, ә американдарҙың роботы 5 минут эсендә 20 бурҙы тотҡан ти, ә Рәсәйҙә шул роботто 5 минут эсендә әллә кем урлап киткән.

**2-се алып барыусы:** –булыр, булыр әхирәт. Рәсәйгә Ахырзаман килеп, башын тырнай-тырнай ҡарап торған да: – Дәәә, мин бында булғанмын икән! – тип, ары китеп барған ти бит.

**1-се алып барыусы:** – булыр булыр. Әйҙә әхирәт киттек миңә, артабан сәй табынында һөйләшербеҙ.

**2-се алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, хөрмәтле мәғариф хеҙмәте ветерандары, уҡытыусылар! Һеҙҙе Уҡытыусы һәм остаз йылына арналған «Һәр уҡытыусы хөрмәткә лайыҡ» исемле әҙәби кисәлә күреүебеҙгә бик шатбыҙ.

Уҡытыусы! Ошо исемдән дә
Юғарыраҡ ниндәй исем бар?!
Күңелем тулы һиңә рәхмәтем бар,
Йырҙа әйтеп бөтмәҫ хисем бар.

**1-се алып барыусы:** Хәйерле көн, хөрмәтле ҡунаҡтар! Кем ул уҡытыусы? Икенсе әсәйме, әллә белемдең иң бейек баҫҡысына үрләргә ярҙам итеүсеме? Бәлки, ҙур тормошҡа әҙерләүселер? Ниндәй генә һорау ҡуйһаҡ та Уҡытыусы һәр кем өсөн, һәр заманда ла иң хөрмәтле, иң абруйлы, иң ихтирамлы кеше булып ҡала. Һәм был исемде йөрөтөр өсөн ниндәй көс, ҡеүәт, тырышлыҡ, сабырлыҡ, ынтылыш, ныҡышмаллыҡ кәрәк икәнен уҡытыусы үҙе генә беләлер.

**2-се алып барыусы:**
Уҡытыусы булыу был тормошта
Бирелмәгәндер ул һәр кемгә,
Энә менән ҡойо ҡаҙған кеүек
Һәр көн өйрәтә ул белемгә.

Эйе, уқытыусы булыу һәр кемгә лә бирелмәйҙер ул. Бала ғүмереҢ иң саф, иң наҙлы, ғәмһеҙ сағы – бала саҡтың матур, мәктәп йылдарының ҡыҙыҡлы хәтирәләр менән үтеүе лә уқытыусы менән бәйле.

Уҡытыусы – ауыр, яуаплы, әммә иң изге һәм мәрхәмәтле һөнәрҙәрҙең береһе. Яғымлы, изге күңелле, балалар менән уртаҡ тел таба белгәндәр генә ошо һөнәрҙе һайлайҙыр.

***Хөрмәтле ҡунаҡтар! Ни өсөн мин «Уҡытыусы» һөнәрен һайланым? тигән темаға әңгәмә ҡорайыҡ.***

***Ни өсөн һеҙ ғүмерлек юлдашығыҙ итеп укытыусы һөнәрен һайланығыҙ?***

***Мәғариф ветерандарының, укытыусыларҙың сығышы.***

**2-се алып барыусы:** Ҙур рәхмәт! Хөрмәтле уҡытыусылар, артабан һеҙгә конкурстар үткәреп ял минуттары ойоштороп алайыҡ! Һеҙгә ике командаға бүленергә кәрәк буласаҡ.

**1 конкурс:** Бирелгән хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөргә. Ҡайһы команда беренсе бөтә шул еңеүсе!

1. РУКО (УРОК)
2. КТИПА (КИТАП)
3. КУИНЛЫКА (КАНИКУЛЫ)
4. ДАВАШТАН (ВАТАНДАШ)
5. АКБТИЕН (КАБИНЕТ)
6. ТЫСҠУЫУЫ (УҠЫТЫУСЫ)
7. КӨЙӘТЙӘН (ЙӘНТӨЙӘК)
8. РЕНАПЕМЕ (ПЕРЕМЕНА)
9. АПРАТ (ПАРТА)
10. ОСКАД (ДОСКА)

**2 конкурс: «Беләрмән» уйыны.** Төрлө өлкәнән һорауҙар бирелә, һеҙгә «Эйе» йәки «Юҡ» тип тиҙ генә яуап бирер кәрәк.

**Мәғариф хеҙмәте ветерандарына:**

1. Билдәле мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла Миәкә районында тыуған.
2. Бронза миҙалы икенсе урын өсөн бирелә
3. «Шоңҡар» журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин.
4. Шәйехзада Бабич премияһы йәштәр өсөн тәғәйен.
5. Дәүләт ордендары уң яҡта йөрөтөлә.
6. Шүлгәнташ мәмерйәһе Ейәнсура районында урынлашҡан.
7. Өфөләге педагогия университеты Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев исемен йөрөтә.
8. Үҫемлектәрҙең дә енси бүленеше бар.
9. Боронғо Грецияла педагог ҡолдарҙың бер төрө булған.
10. Социалистик Хеҙмәт Геройы, Башҡорт АССР-ы мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Лира Камалова Йәнтеш ауылы мәктәбе директоры булып эшләгән.
11. «Ихтиология» фәне – бәшмәктәрҙе өйрәнә.
12. «Эмодзи» ул ҡыҙыҡлы видеолар.

**Уҡытыусыларға:**

1. Легендар Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатов Ҡырмыҫҡалы районында тыуған.
2. «Ҡайҙа һинең тәтәйең, бына минең тәтәйем» тип сөйәлде ҡояшҡа күрһәтәләр.
3. «Теге өсәү»ҙең береһе Филүс Ҡасимов.
4.Үгеҙйөҙөк - ул милли биҙәүес төрө
5. Башҡортостандың иң юғары нөктәһе «Ямантау».
6. «Бәйләнештә» социаль селтәренең логотибы йәшел төҫтә.
7. «Палеонтология» фәне боронғо хайуандарҙың ҡалдыҡтарын өйрәнә.
8.Башҡортостанда иң ҙур район Белорет районы.
9.«Уҡытыусыма» йырының һүҙҙәрен Зәйнәб Биишева яҙған.
10. Салауат Юлаев ордены хәрби батырлыҡтар өсөн тапшырыла.
11. Хараусты маңлайға тағалар.
12.«Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире Гөлназ Ҡотоева.

**4 конкурс: сетерекле хәл-ваҡиғаларҙан сығыу юлдары.**

1. Һеҙ уҡытыусылар йыйылышынан һуң дәрескә кәйефһеҙ индегеҙ һәм бер уҡыусыға шиғырын ятламаған өсөн икеле ҡуйҙығыҙ. Киләһе дәрескә уҡыусы шиғырын ятлап килер урынға телефонына наушник тығып музыка тыңлап ултырҙы, һеҙ уға бер-нисә тапҡыр иҫкәрмә эшләнегеҙ. Уҡыусы һеҙҙе ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә. Икенсе дәрестә лә, шул уҡ хәл. Был конфликтан сығыу юлығыҙ.

2. Дәрестә Зәйнәб Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» повесына ҡарата ҡыҙыу фекер алышыу бара. Һеҙ һәр ваҡыт дәрестә әүҙем ҡатнашып ултырған үҙ фекерен тулы, матур итеп белдергән уҡыусығыҙҙың фекере менән килешмәнегеҙ һәм һеҙҙең арала ҡыҙыу бәхәс булып алды. Икенсе дәрестә был уҡыусы шып-шым, башҡа уҡыусылар ҙа үҙ фекерҙәрен артыҡ әйтеп барманылар, уҡытыусы һәм уҡыусылар араһында стена барлыҡҡа килде. Бына һеҙ киләһе дәрескә индегеҙ һәм.....

**5 конкурс: Хөрмәтле уҡытыусылар һеҙгә пазл йыйырға кәрәк, пазлды йыйғас килеп сыҡҡан мәҡәлде уҡып ишеттерергә.**

Беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр.
Ер ҡәҙере игендә, кеше ҡәҙере белемдә.

***Район мәҙәниәт йорто йырсыһы, республика кимәлендә үткәрелгән төрлө бәйгеләр лауреаты, «Ҡайтауаз» гармунсылар ансамбле етәксеһе Гөлфиә Хәләфетдинованан музыкаль бүләк***

**6 конкурс: «Йомаҡтар иленә сәйәхәт»**

1. Бабай бүреге йөҙ ямау.

2. Көн һайын ябыға,
Йыл аҙағында үлә.

3. Ҡалаһы бар – халҡы юҡ,
Диңгеҙе бар – һыуы юҡ.

4. Һиндә лә бар, миндә лә бар,
Әҙәмдә юҡ, донъяла бар.

5. Ауыҙы юҡ, күп телле,
Дәртләндермәй һуң кемде?

6. Эсе ҡыуыш,
Дыңғылдарға уны ҡуш.

7. Һүҙе килә - үҙе килмәй.

8. Көн үткәнде кем белә,
Мин онотһам, ул белә.

9. Тәҙрә башында терәү,
Һөйләп тора берәү.

10. Урманға барғанда, өйгә ҡарай,
Өйгә ҡайтҡанда, урманға ҡарай.

11. Береһе әйтә: «Йәй тыныс»,
Икенсеһе әйтә: «Ҡыш тыныс»,
Өсөнсөһө әйтә: «Йәй ҙә, ҡыш та бер тормош,
Юҡ ул миңә тиктормош».

12.Иртә килә, кис ҡайта.

**7. конкурс. «Мәктәпкә йыйынабыҙ».** Һәр команданан бер кеше сыға, өҫтәлдә төрлө уйынсыҡтар, мәктәп кәрәк-ярағтары ята. Күҙегеҙҙе бәйләйбеҙ, шуның араһынан мәктәпкә кәрәк булған предметтарҙы һайлап йыйып алырға. Кем беренсе! *(Телефон, дәфтәр, ручка, карандаш, помада, флешка, китап, скотч, тени, ҡулъяулыҡ, ҡайсы, конфеты, теш таҙартҡыс, линейка, уйынсыҡ машина, наушники, һабын, йомшаҡ уйынсыҡ).*

***Командаларҙың бер-береһенә музыкаль бүләге.***

***«Уҡытыусы – изге һөнәр» исемле китап күргәҙмәһе байҡау яһау.***

**1-се алып барыусы:** Һәр бер кеше был тормошта уҡытыусы була аламы икән? Юҡтыр, сөнки уҡытыусы һөнәренә сабыр холоҡло, белемле, ә иң мөһиме, балаларҙы ысын күңелдән яратҡан, улар өсөн янып – көйгән, киң күңелле кешеләр генә лайыҡтыр.

Хөрмәтле мәғариф хеҙмәте ветерандары һәм хәҙерге көндә тырышып эшләп йөрөгән уҡытыусыларыбыҙға эшкә дәртләндергән, иңдәренә ҡанат ҡуйған ҡанатлы һүҙҙәр, изге теләктәрегеҙҙе еткерһәгеҙ ине.

**2-се алып барыусы:**
Яҙыусы Фирүзә Абдуллинаның «Ауыл уҡытыусыһы» шиғыры

Мин – ябай бер уҡытыусы.
Ауыл уҡытыусыһы.
Кәрәк икән – сөгөлдөрсө,
Кәрәк булһа – баҡсасы.

Штукатур ҙа, маляр ҙа беҙ
Ремонт яһарға булһа.
Тарихсы ла, ижадсы ла,
Алға маҡсат ҡуйылһа.

Агитатор булабыҙ беҙ
Һайлауҙар яҡынлашһа,
Урам буйлап сүп йыябыҙ
Субботниктар башланһа.

Кәрәк икән – режиссер ҙа,
Бейеүсе лә, йырсы ла,
Рәссам да беҙ, сценарист та,
Ҡулдан килә барыһы ла.

Бөтәһе лә ҡулдан килә
Әммә иң ҙур эшебеҙ:
Яҡшы кеше тәрбиәләү –
Шундай кәрәк кеше беҙ!

Уҡытыусы белем бирә,
Ул – кәңәшсе, ул – терәк.
Ауыл уҡытыусыһына
Һәйкәл ҡуйырға кәрәк!

**1-се алып барыусы:** Уҡытыусы – үҙе янып, бүтәндәргә яҡтылыҡ һибеүсе шәм, тиҙәр. Шәм һәр саҡ яҡтылыҡ биреп торһон өсөн, мотлаҡ талаптарҙың бер нисәһе – үҙ өҫтөңдә эшләү, өҙлөкһөҙ белем эстәү, тормоштан бер аҙымға алда атлау һәм әлбиттә тырыш «Мин! Мин!», тип торған аҡыллы уҡыусылар теләйбеҙ. Һәр ваҡыт уҡыусыларығыҙҙан «Рәхмәт» һүҙен ишетеп йәшәргә насип булһын. Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, ғаилә именлеге теләйбеҙ. Аяҙ күгебеҙ яҡты, тыныс, эшебеҙ уң, бәрәкәтле булһын!
Осрашҡанға тиклем, һаубулығыҙ.